**Ветеран ҡартайыма хат.**

Һаумы, минең ҡарт ҡартайым Хажиғәле!

Был хатты һиңә ейәнең Динар Мөхәмәтйәнов яҙа. Мин Ғайса Аҡманов исемендәге Байыш урта мәктәбенең 3-сө класында уҡыйым. Ҡартай, һине бер ҡасан да күргәнем юҡ. Ләкин һинең батыр, ҡыйыу, йор һүҙле икәнеңде атай-әсәйем, олатайҙарым һөйләүенән, фотоларҙан ҡарап беләм. Бәләкәй сағымда, һинең турала атайым кис йоҡларға ятҡанда, гел әкиәт һымаҡ һөйләй торғайны.

Их, ҡартай, һин шундай батыр булаһың. Мин һине һәр ваҡыт әкиәттәге батырҙар менән тиңләйем. Һунарға йөрөгәнһең, балыҡ тотҡанһың, тере йәнлектәрҙе лә алып ҡайтҡанһың. Ҡартай, әгәр ҙә һин тере булһаң, мин дә һинең менән һунарға, мурҙа менән балыҡ тоторға йөрөр инем...

Һуғыш башлана... Дошмандар Мәскәүгә яҡынлаша. Ил өсөн иң ауыр мәлдә Башҡортостанда 112-се башҡорт атлы дивизияһы төҙөлә. Һәм минең ҡартайым ат яратҡанға ошо дивизияға эләгә. Ул шаян һәм батыр кавалерист була. Ҡартайым Шайморатов генерал менән бер дивизияла һуғыша.

Дошман тылдары буйлап, рейдтан сыҡҡанда, уларҙың дивизияһы ҡамауға эләгә. Хәл өмөтһөҙ булһа ла, Шайморатов генерал яугирҙарын “Салауат вариҫтары, алға!”-тип үҙе атакаға күтәрелә. Беҙ, атлылар дошмандарҙы тар-мар итеп, үҙебеҙҙең фронт яғына сыҡҡанда, беҙҙең генералыбыҙ юҡ ине.

Ошонан һуң беҙ үҙебеҙҙе “Шайморатовсылар” тип йөрөтә башланыҡ. Яратҡан командирыбыҙ өсөн фашистарҙан үс алдыҡ һәм еңдек!

Бына ҡартай, атайым һөйләгәндәрҙе һиңә лә еткерҙем. Һинең турала беҙ бер ҡасан да онотмайбыҙ! Һинең батырлыҡтарыңды быуындан-быуынға еткерербеҙ!

Оҙаҡламай 9 май, Еңеү байрамы етә. Быйыл Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығын ҡаршылайбыҙ. Ҡартай, һин беҙгә аяҙ күк йөҙө, тыныс тормош бүләк иттең. Һинең күрһәткән батырлыҡтарың өсөн ҙур рәхмәт!

Ҡәҙерле ҡартайыма сәләм менән Динар.

бессмертный ПОЛК



# Мөхәмәтйәнов Хажиғәли

# Ғайса улы